■ Хазина

ИСЛАМ ДИНЕНДӘ ҺҮҘҘЕҢ БАҺАҺЫ

Башҡортостан мосолмандары Диниә назараты рәйесе мөфтөй Нурмөхәммәт хәҙрәт Ниғмәтуллин:

- *Бисмилләһир-рахмәнир-рахим!*

Әл-хәмдү лил-ләһи раббил-ғаләмин Үәс-саләтү үәс-сәләмү ғәлә мөхәммәддән үә ғәлә әлиһи үә әсхәбиһи әжмәғин.

Ислам динендә һүҙҙең баһаһы ифрат юғары. Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәләйһис-сәләм үҙенең мөбәрәк хәҙисендә: "Иманлы бәндә күркәм, күңелгә ятышлы итеп һөйләр, әгәр һүҙ һөйләнә икән, уны тыңлай белер", - тигән. Әйткәндәребеҙ икенсе кешенең күңелен төшөрмәскә абруйына зарар килтермәскә, уны дәртләндерергә, рухландырырға тейеш.

Быны менән бергә боронборондан һүҙҙең тоғрологона, хаклығына ҙур иғтибар бирелгән. Әммә әлеге заманда был йәһәттән шөкөр итә алмайбыҙ: тормошобоҙҙа ялған, алдашыу, хәйлә ифрат ҙур урын биләй бара. Һәҙәмтәлә һүҙҙең көсө кәмей, кешеләрҙең бер-берененә ышанысы ҡакшай.

Ялған һүҙҙәр ҡайҙа һуң ул? Тәү сиратта - рекламала. Белеүебеҙсә, уның байтаҡ өлөшө алдашыуҙан ғибәрәт, ниәттәре - тауарҙы нисек тә һатып ебәреү. Мәҫәлән, яңы йорттарҙың оҙаҡ та тормай емерелә башлау осрактарын ишетеп беләбеҙ. Мөхәммәт ғәләйһис-сәләм үҙенең мөбәрәк хәҙисендә: "Ғәҙел сауҙагәр ҡиәмәт көнөндә пәйғәмбәрҙәр менән бергә булыр", - тигән. Ул яҡшы тауар тәҡдим итә икән, килгән аҡсаһының бәрәкәтен күрер. Шулай ул һатып алыусының ихлас рәхмәте, изге теләге күңелен хушландырыр. Әгәр инде тауары сифатһыҙ булһа, рәнйеш тойор. Кеше барыһын да изге теләк менән һатып ала бит: мәҫәлән, күлдәкте матур итеп, һаклап кына кейергә, яңы йортта күмәкләп татыу йәшәргә ниәтләй. Ялған - йәмғиәтте һәләкәткә алып бара торған юл ул.

Динебеҙҙә алдашыуға, хәйләгә урын юҡ. Шуның өсөн дә, хөрмәтле кәрҙәштәр, дәрәҫләктә һөйләргә ынтылайыҡ. Балаларыбыҙҙы ла тоғролоҡка, ғәҙеллеккә өйрәтергә бурыслыбыҙ. Аллаһ Тәғәлә һәммәбеҙгә лә тормошобоҙҙо хаҡ эш менән алып барырға, әйткән һүҙебеҙҙә торорға насип ҡылһын. Шулай булһа, иншаллаһ, үҙ-ара мөнәсәбәттәребеҙ яҡты, күркәм, донъябыҙ имен булыр. Амин.

■ Ғилем һәм ғәмәл

КИТӘБҮТ-ТӘРБИӘ

Ҡәйүм НАСЫРИ

Йөҙҙә өсөнсө тәрбиә

Даһи ахмаҡ үә наҙан менән иптәш булма. Сөнки ахмаҡ кеше һиңә файҙа иткән кеүек күренһә лә, зарарлылыр. Үә даһи ҡомһоҙ кеше менән аралашма. Сөнки ул кеше гел һинән өмөт итеп кенә торор. Йәнә даһи һаран кеше менән юлдаш булма. Сөнки һаран кеше һиңә һис бер зарарҙан хали (бушамаҫ) булмаҫ. Әгәр ҙә уға хәжәтең төшһә, һине кәмһетер үә хур ҡылыр. Хосусән, сәфәрҙә һаран кеше менән юлдаш булма. Даһи ла ҡурҡаҡ үә ебегән кеше аралашма, сөнки ҡурҡаҡ кеше менән һис имен булмаҫһың.

Йөҙ ҙә дүртенсе тәрбиә

Эй улым, бер ҡәүемдә күрһәң, сәләм бир. Йәғни бер ерҙә күп кеше булһа, йәки күп кешегә осраһаң, уларға һин сәләм бир. Сөнки бер кешенең күп кешегә сәләм биреүе һәм сәләм ҡайтармаҡ, уларға үәжиб эштер... Даһи ат менән барған кеше йәйәүлегә, йәйәү барған кеше ултырып тороусыға сәләм бирер. Әммә, эй улым, сәләм бирһәң ишеттереп бир, сәләм алһаң ишеттереп ал. Йәғни сәләмде ишеттереп бирмәһәң, гүйә һин сәләм бирмәнең, әгәр ишеттереп алмаһаң, шулай уҡ сәләмде алмаған кеүек булалыр.

Йөҙ ҙә бишенсе тәрбиә

Балаларға сәләм биреүгә ҡарата әйтелгән кәңәштәр күп төрлә һәм бик ҡаршылыҡлы. Әммә, бала-сағаға ғына булһа ла, сәләм биреү хәйерлерәктер. Әгәр бер кеше лә булмаған өйгә барып керһәң дә сәләм биреү тейеш тә баһа. Фәләнфәлән урындарға сәләм бирелмәһен тигән кәңәш ҡайһы бер яҙмаларҙа күренгеләһә лә, шәриғәт дәреслектәре, "Бүстән" кеүек китаптарҙа ундай һүҙҙәр күренмәне.

Йөҙ ҙә алтынсы тәрбиә

Йәнә был өлөштә тәрбиә һиңә әйтелде. Имде кейем хаҡында әйт тиһәң, эй улым, кейемең баһалы булыусылыкта үә арзан булыусылыкта, үҙендең имсәлең (миҫалың) үә тирәндәгеләрҙең кейеме кеүек булһын. Йәғни һинең кеүек кешеләр ни баһалы кейем кейәләр, һин улар кейеменән баһалыраҡ кейемдә кейма. Сөнки ихтималдыр, уларҙа хәсәт тыуыр ҙа шикәйәттән хали (буш) булмаҫтар. Уртаса кейенергә кәрәк, ифрат үә кәмлек тә ярамай, һис бер урында. Әммә тәҫтәрҙең артығырағы, шәриғәтебеҙҙә аҡ тәҫтәр. Ләкин шәриғәт тә тәҫтә күп тәфтиш ҡылмайҙыр (тикшермәйҙер), теләһәң ниндәй тәҫтә кей. һис тыйыу юҡ. Ләкин кейемдең рәүешендә һаҡлыҡ кәрәк. Йәғни исраф ҡылма үә тәкәбберлек тә итмә.

Йөҙ ҙә етенсе тәрбиә

Эй улым, йорт һалдырһаң, бик оло итмә, бик бейек итмә, үҙең урынлашып торорлоҡ булһа, етәлер. Бик олуғ йорттоң яйһыҙлығы шулдыр, донъя бер ҡарарҙа тормайҙыр, ихтимал эшең артҡа китһә, закладка һалырһың йәки һатырһың, баһа еткереп алыусы булмаҫ.

Йөҙ ҙә һигеҙенсе тәрбиә

Эй улым, өс нәмә күңелде шатландырыр үә аҡылды саф ҡылыр: гүзәл ҡатын, етерлек ризыҡ үә яҡын дуҫ, ҡарындаш. Даһи дүрт нәмә барҙыр, әҙәм уны ифрат үә сиктән тыш күп ҡылһа, һәләк булалыр: әүүәл ҡатын менән маташһа әҙәм һәләк булалыр. Йәнә яуызлыҡ артынан күп йөрөй торғас, әҙәм һәләк булалыр. Даһи күп отош уйнаһа, әҙәмдең һәләкәте ундалыр. Даһи лә күп хәмер эсһә, һәләк булмай ҡалмайҙыр.

Йөҙ ҙә туғыҙынсы тәрбиә

Эй улым, бәрәү аҙғындарға эйәрһә, ул кешенең дине бөтән булмаҫ. Әгәр бәрәү бер әшәке кешене маҡтаһа, халыҡ араһында үҙ ҡиммәте бөтәлер.

"Дәғүәт" нәшриәте, аҙағы.

■ Уйлан

ДИНИ МӘЖЛЕСТӘРҘӘ

Раушлә БАЗИКОВА

Ҡөрьән Кәрим һәм хәҙистәр, дин ғилеме бөйөк бер ниғмәт, оло бәхет һәм сәғәҙәт ишектәренең асҡысы булыуын өйрәтә. Изге китап Ҡөрьән Кәримдә ғилем хаҡында ете йөҙ егерме мәртәбә телгә алына.

Төрлө бөҙөклоктар, аҙашыуҙар, аҙғынлыктар, битарафлыҡ йәшәйешебеҙҙә ғәжәйеп етәҙлек менән таралған бер ваҡытта, хаталарыбыҙҙы төҙәтеп, дин ғилемен өйрәнеп, мосолман булыуҙың ҡиммәтен һәм ҡәҙерен белеп йәшәүҙән дә оло бәхет юҡ беҙгә. Мосолман икәнендә белдереүсе төп сифат - игелек булыуын да оноторға ярамай йәмәғәт.

Ризаитдин бин Фәхретдин хәҙрәттең яҙып ҡалдырған мәжлес ҡағиҙәләрен тәҡдим итәбеҙ.

Халыҡ алдында әҙәпле итеп үҙегеҙгә лайыҡлы урынды һайлағыҙ. Хөрмәтле кешеләр булғанда уларҙы ихтирам итеп бер аҙ йыраҡырак, әгәр яндарына ултырырға булһағыҙ, улар теләһәләр генә эргәләренә ултырығыҙ.

Ултырғыстарығыҙға ятмағыҙ, бер яҡҡа ауышмағыҙ, аяҡтарығыҙҙың беренһен икенсеһе өҫтөнә һалмағыҙ. Һөйләүсе булһа тыңлағыҙ. Тауышығыҙҙы кеше тауышынан өҫтөн күтәрмәгеҙ. Кәрәкмәһә көлмәгеҙ, мәжлескә лайыҡ булмағанды һөйләмәгеҙ, һөйләүсенең һүҙен бүлмәгеҙ. Халыҡ алдында иң мөхәббәтһеҙ кеше - мәжлестә үҙен оло итеп күреүсе. Шуның өсөн дә үҙегеҙҙе башҡаларҙан оло тип иҫәпләмәгеҙ, үҙегеҙҙең дәрәжәгеҙҙе белегеҙ...

Ҡөрьән мәжлесенең тәртибен беләбеҙме?

Гәзит уҡыусыларҙың һорауы буйынса Ҡөрьән мәжлесен (мәрхүмдәрҙе иҫкә алыу) үткәреү тәртибе менән ҡыҫҡаса булһа ла танышырып үтергә булдыҡ. Дөрөҫөн әйткәндә, мәжбүр булдыҡ. Һүҙ шулай уҡ изге мәжлестәрҙе үткәргәндә шәриғәтебеҙ ҡушмаған ғәмәлдәр менән дини мәжлестәрҙең йәмен ебәреүебеҙ тураһында ла буласаҡ.

Халҡыбыҙ борон-борондан төрлө дини мәжлестәр үткәргән һәм үткәрә. Ләкин айырмаһы шунда, элеккеләр мәжлес үткәреүҙең тәртибен белгән һәм боҙмаған. Бөгөнгө йәшәйешебеҙҙә Ҡөрьән мәжлесен үткәрмәгән кеше юҡтыр ул, әммә хөкөмдәрен белмәү арҡаһында ойоштороу тәртибе юҡҡа сығып бара... Әгәр бөгөн ошо хаталарыбыҙҙы күрһәтеп өйрәтмәһәк, яңылышыуыбыҙҙы танымаһаҡ, төҙәтмәһәк, йәш быуын да шул уҡ хаталарҙы ҡабатлаясаҡ. Шуның өсөн дә бер нисәүһен булһа ла телгә алып китергә булдыҡ.

Бер кәрҙәшемдә сәғәт 11-гә Ҡөрьән уҡырға саҡыралар. Һуңламай килә. Сәғәт ун ике, бер, ике тулып китә. Өс сәғәттән һуң ҡунаҡтар саҡ йыйылып бөтә. Кемеһе нимәгә һуңлағанын көлә-көлә һөйләгәнсе, тағы егерме минут үтә. Муллалар ҙа һуңлай әле, тип ғәфү үтенеүсе лә булмай. Бер яҡтан дөрөҫ әйтәләр, муллаларҙың да саҡырылған ергә һуңлап кына түгел, вәғәҙә биреп тә, икенсе байыраҡ саҡырыусыға барыуҙарын ишетәбеҙ. Ошо урында әйтергә кәрәк, беренсе саҡырған кешенең күңеле ҡала, рәнйей. Иң беренсе кемгә вәғәҙә бирелһә, шунда барыу мотлаҡ. Саҡырған кешегә барыуҙың важиб ғәмәл икәнлеген дә онотторға ярамай.

Ҡайһы сакта егерме кеше 5-әр сәғәт бер кешене көтөп, юҡбар һөйләшеп ваҡытын үткәрә. Ҡөрьән мәжлесенә һуңлап килеү әҙәпһеҙлек һанала. Мосолман, ваҡытты ҡәҙерен белергә тейеш. Бер мәжлестә бар ҡунаҡтар йыйылып бөтә, әммә хужа кемделәр көтөп тик йөрөй икән, кемде көтәһең тигән һорауға ул: "Иң важный кунағымды көтәм", - тип яуап бирә. Алыҫтан сатлама һыуыкта ат егеп, сабый балаһы менән һуңламай килеп еткән ҡунаҡтың, хуҗаның был һүҙенә күңеле ҡалып: "Беҙ бында важный түгел икән, әйҙә әбей, төр баланды кайттыҡ", - тип ас килеш сығып ҡайтып китеүҙәрен дә ишеткән бар...

...Бер йәш кеше ошондай һорау биргән ине: "Бер апай аҡ яулыҡ ябынып мәсеткә йөрөй, әммә көмөшкә һата, кәртәһенең артынан һуҡмаҡ һалынып китте. Шул хәрәм кәсеп итеп алған аҡсаһына аят мәжлесе лә үткәрә. Нисек инде улай, күрше-тирәбер-беренһен белә лә инде. Апай, быны әйтегеҙ әле. Аҡ яулыклы, ҡара эсле булып кешене алдап була ти, ә быны Алланы алдап булмай. Ул бер нәмәне белеп, күреп тора бит. Мин мәсеткә йөрөгән кешеләрҙе улай тип уйламаған инем", - тине. Ҡыйын хәл, иман зәғифлеге, ундайҙар ҙа етерлек бөгөн. Әммә белегеҙ ки, көмөшкә һатып, динебеҙҙә тыйылған хәрәм юл менән табылған аҡсаға ризыҡ һатып алып, Ҡөрьән мәжлесе үткәреп, ул аҡсанан саҙаҡа таратып ултырыу гонаһтың да гонаһы. Саҡырған кешенең тапкан малы, аҡсаһы, хәләл булырға тейеш. Әгәр ҙә көмөшкә һатып аҡса эшләгәнен беләһегеҙ икән, ундай кешегә ҡунаҡҡа барыуҙы шәриғәтебеҙ ҙә тыя. Мәсеткә йөрөй икән, бик мәслихәт. Алланан оялып тиҙерәк тәүбәгә килһә тағы ла хәйерле. Сөнки шайтан һыуы менән күпме кешене ағыулап, йәштәрҙе аҙҙырып, күпме ғаиләне таркатып, һаҫыҡ тамуҡ һыуын йыйлан ағыуындай таратып ултырыу ҡатын кешегә, әсә кешегә бигерәк тә оят һәм аяныслы хәл.

...Изге мәжлестәрҙә ҡатынҡыҙҙарҙың ярым-шәрә хәлдә, сит ир-егеттәр алдында, көләкөлә теләнә нәмә һөйләп ултырыуҙары аптырата. Тыйып ҡара уларҙы хәлендән килһә, тигән бер мулла. Дини мәжлестәрҙә мәсет, дин ғилеме хаҡында, хәҙистәр тураһында һүҙ алып барылһа, вәғәздәр һөйләнһә, сауаплы һанала бит. Әйткәндәй, бер мәжлестә ярым-шәрә ултырған ҡатын-ҡыҙҙарға яулыҡ ябынып, ғәүрәттәрен ҡаплау кәрәклеген аңлата мулла. Йәшерәктәре яулыҡ ябына, ә олораҡтар ҡымшанмай ҙа ултыра бирә. Ахырҙа мулла бында бит аят уҡығанда фәрештәләр инмәй, тигәс кенә теге ҡатын яулыҡ алып бер як яланғас яурынын ҡаплай, ә икенсеһе асыҡ ҡала. Мулла тағы ла бер ҡабатлай. Ҡатын уҫал тауыш менән: "миңә ҡарап уҡып ней, ана мөйөшкә әйлән дә, шунда ҡарап уҡы!", тип екерә".

Ҡуптән түгел бер мәжлескә ҡырҡҡа яҡын кеше саҡырылған ине, тип һүҙен башланы бер кәрҙәшем. Мулла аят уҡығас, саҙаҡа тарата башланылар. Ҡырҡ кешенең этешә-төртөшә, мә һиңә, ҡана миңә хәйер бирмәнең, ана-анау кешегә лә бир, тигән кеүек һүҙҙәр менән аҡса алмаштырышыуҙары башланды. Өй эсе тар. Ир-егеттәр менән ҡатын-ҡыҙҙар бергә ултыра. Ҡайһыныһы арты менән ирҙәргә тейә-тейә, өҫтәлгә ятып саҙаҡа тарата. Ислам шәриғәтенә тура килмәгән йәмһеҙ күренешкә әйләнде мәжлес. Сит ирҙәргә бер ерең менән ҡағылыу ғына түгел, хатта сит ирҙәрҙең ят ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарауы ла хәрәм. Әллә нисә сәғәт үткәндәй булды, өй эсе кеше күплектән әҫел китте. Шунан башланды оҙон итеп аятдоғалар уҡыу. Арый башланылар. Кемдер эштән һорап килгән, кемгәлер ауылға ҡайтыр өсөн автобусҡа сығыр кәрәк ине. Ахырҙа ҡунаҡтарҙың беренһе түҙмәне, ярай уҡыныгыҙ бит инде, булды, асыктыҡ, тип әйтеп һалмаһынмы. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың ир-егеттәр менән бергә ултырыуын шәриғәтебеҙ ҙә ҡушмай. Ислам динендә тыйылған ғәмәл. "Нур" сүрәһенең утыҙынсы аятын уҡып ҡарағыҙ. Ә саҙаҡа таратыуға килгәндә Аллаһы Тәғәлә хәйерсаҙаҡаны бары тик фә-кир-мохтаж кешеләрҙәргә өлөшө тигән. Динебеҙҙә: "Эшләгән ғәмәлдәрегеҙ дөрөҫ булһын. Шәриғәт ҡушканса эшләгеҙ", - тип әйтелә. Тамағы туҡ булып, етеш йәшәгән кешегә саҙаҡа алыуҙың хәжәте юҡ. Хәйер-саҙаҡаны үҙендән артҡанын ғына бирергә ҡушыла. Мәжлестә аҡса алмаштырышып ултырыу һис ниндәй саҙаҡа булмаҫ. Был эш менән үҙенде лә, кешеләрҙе лә алдарға ярамай, тип өйрәтә динебеҙ. Ата-олатайҙарыбыҙ шулай эшләгән, тимәгеҙ. Ата-бабаларыбыҙ мосолман булған. Ошоноң кеүек һүҙҙәр менән уларҙың рухтарын рәнйетергә ярамай.

Шулай уҡ дини мәжлестәргә йөрөп шунса аҡса һуҡтым, тип йәйнә мин бит аят уҡыным, миңә башҡаларға ҡарағанда күберәк бирергә тейешһең, тип хаҡ ҡуйып, йәйнә шул кеше бай шуға барайыҡ, тегенеһе ярлы бармайыҡ тип йөрөгәндәр ҙә бар. Быныһы инде сиктән уҙып, саманан сығып китеү.

(Аҙағы бар).